Уҡытыусы: Исламова Зулиә Хәмзә ҡыҙы
Класс: 5 а

## Дәрестең технологик картаһы

| | |
|---|---|
| Дәрес темаһы | __Лексик тема: Й. Солтанов “ Башҡортостан флагы”<br>Грамматик тема: Сифат. |
| Дәрес төрө | Яңы теманы өйрәнеү дәресе. |
| | **Белем биреү маҠсаты**: тема буйынса уҠыусыларҙың белемдәрен арттырыу; Сифат һүҙ төркөмө темаһын нығытыу. Башҡортостан символдары менән таныштырыу.<br>**Үҫтереүсе:** тема буйынса бәйләнешле аралашыу күнекмәләрен үҫтереү, өйрәнгән һүҙҙәрҙе телмәрҙә Ҡулланыу; Фекерләү,зиһенләү һәләттәрен үçтереү.<br>**Тәрбиәүи**: Туған телгә , тыуған илебеҙгә һөйөү тойғолары тәрбиәләү; Уҡыусыларҙа ғорурлыҡ хистәре уятыу. |
| Көтөлгән<br>һөҙөмтәләр: | **Предмет УУЭ һөҙөмтәләре**: тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, уларҙы бәйләнешле телмәрҙә Ҡулланыу.<br>**Метапредмет (предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре**:<br>а) регулятив: уҠытыусы, булған белемдәрен барлау, баһалау; б) танып белеү: өлгө буйынса эш итә белеү, өйрәнеү (төркөмләп эшләй белеү, файҙалыһын һайлау); в) коммуникатив: темаға Ҡарата бәйләнешле текст төҙөй белеү, үҙ-ара аралашыу, төркөмдә хеҙмәттәшлек итә белеү.<br><br>**Шәхси УУЭ һөҙөмтәләре:** үҙаллылыҠ сифаттары үҫтереү, туғандарына, дуҫтарына, класташтарына иғтибарлы, ихтирамлы булыу, этикет белеү. |

| | |
|---|---|
| Йыһазландырыу | Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С.. “Башҡорт теле”. 5-се класс уҡыусылары өсөн дәреслек - Өфө: “Китап”, 2014 й., мультимедиа проекторы, (5 класс уҡыусылары өсөн башҡорт теленән электрон дәреслек) , |
| Предмет-ара бәйләнеш | Тормош һабаҡтары, биология, тирә-яҡ мөхитте өйрәнеү, Башҡортостан культураһы һәм мәҙәниәте. Рус теле һәм әҙәбиәте менән туранан тура бәйләнеш, рус теле менән дәрестә сағыштырып алып барыу |

| **Дәрес этаптары** | **Уҡытыусы эшмәкәрлеге** | **Уҡыусылар эшмәкәрлеге** | **Дәрестең һәр этабында формалаштырылған УУЭ** ***(регулятив, танып белеү, коммуникатив, шәхси)*** |
|---|---|---|---|
| I.Ойоштороу моменты.<br><br>Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу | I.- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!<br><br>Хәйерле иртә.<br><br>Хәлдәрегеҙ , кәйефтәрегеҙ нисек?<br><br>Һеҙ әйткәс, беҙ әйткәс, | Уҡыусыларҙың яуаптары<br><br>**Бөгөн беҙҙә башҡорт теле,**<br>**Яратам һине, телем!**<br>**Рәхмәт һиңә, һинең аша**<br>**Алам мин яҡшы белем!**<br><br>Тиҙәйткесте укыйҙар. | **Регулятив**: үҙҙәренең уҡыу эшмәкәрлеген ойошторалар;<br><br>**Шәхси**: белем алыуға, уҡыуға ҡарата, дәрескә ыңғай ҡараш күрһәтәләр.<br><br>**Танып белеү**: яңы белем алыу кәрәклеген аңлайҙар, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштыралар. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Фонетик-орфоэпик күнегеүҙәр. | Беҙ әйткәс, һеҙ әйткәс,<br>Бер әйткәс, йөҙ әйткәс,<br>Йөҙ әйткәс, мең әйткәс,<br>Төҙәткес, тиҙәйткес.<br><br>Төрлөсә укыу:<br>-хор менән,<br>**смайликтағы кәйеф менән,**<br>-илап ,<br>-йырлап,<br>-көлөп,<br>-асыуланып....<br>Башҡорт теленең матурлығына , нәфислегенә көндән- көн һоҡланабыҙ.<br>Көндән-көн башҡорт телен нығыраҡ өйрәнәбеҙ. | Уҡыусылар уҡытыусы артынан ҡабатлайҙар.<br><br>Үҙҙәре бирелгән смайлдарға таянып укыйҙар.<br><br>. | |
| II.Уңыш ситуацияһы тыуҙырыу (белемдәрҙе актуалләштереү) | -Башҡорт теле ниндәй республика-ның дәүләт теле булып һанала ?<br>- Ә Башҡортостан ниндәй ил ул?<br>**-матур**<br>**-бай**<br>**-Һөйөклө** | Башҡортостандың дәүләт теле. | **Регулятив:** уҡыу мәсьәләһен аңлау, ҡабул итеү, маҡсатҡа ярашлы эштәрҙе башҡарыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **-иркен**<br>**-ҡунаҡсыл**<br>**-күп милләтле**<br>**-йомарт** ***( слайдта ҡурай таждары менән күрһәтелә.)***<br>-Был һүҙҙәр ниндәй һорауға яуап бирҙе?<br>- Был нимә килеп сыҡты ,балалар?<br>- Был ҡурай тажын ҡайҙа күргәнегеҙ бар? | Ҡурай тажы килеп сыҡты.<br><br>Флагта , гербта…. | **Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте текстан ишетеп аңлау<br><br>**Коммуникатив:** тыңлайҙар һәм диалогка инәләр, әңгәмәгә ҡушылалар<br>**Шәхси**: уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу, уҡыуға, яңылыҡ белеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сифаттары формалаша. |
| III.Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу. | - Шулай итеп, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?<br>-Үҙебеҙгә ниндәй <u>маҡсат ҡуябыҙ?</u><br>**Дәүләт символдарын белеү .**<br>**Ниндәй һорауына яуап биреүсе һүҙҙәрҙе ҡабатлау.** | БРСимволдары тураһында,һәм сифаттар һөйләшәсәктәре тураһында әйтәләр.<br>Уҡытыусы менән берлектә дәрескә маҡсат ҡуялар. | **Танып белеү**: логик фекерләү (сылбырын) алгоритмын төҙөйҙәр.<br>**Регулятив:** уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләйҙәр. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| IV.Яңы материалды өйрәнеү.<br><br>Уҡыу проблемаһын сисеү. | 1. Күптән түгел ҙур байрам булды , хатта ял да иттегеҙ. Ул ниндәй байрам булды ул?<br>Нисәһе, ҡасан булды ул?<br>2. Ә һеҙ Башҡортостан тураһында шиғырҙар беләһегеҙме?<br><br>3. Республиканы үҙ аллы иткән ниндәй символдарҙы беләһегеҙ?<br>***(слайдтар)***<br>-Гербта нимәләр төшөрөлгән?<br>-Президенты кем?<br>**( слайд)**<br><br>- Флаг,байраҡ тураһында шиғыр тыңланығыҙ.<br>- Флагта нимәләр төшөрөлгән, ниндәй төҫтәр һуң?<br>- **Зәңгәр**- яҡты хыялдарҙың сағылышы,аяҙ күк йөҙө.<br>- **Аҡ**-Тыныслыҡ,яҡты киләсәк.<br>- **Йәшел**- азатлыҡ, байлыҡ, муллыҡ. | 11 октябрь- Республика көнө.<br><br>Герб , флаг, президент, конституция, гимн.<br><br>Р.Хәмитов, элеккеһе М. Рәхимов | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | 4. Й.Солтановтың шиғыры менән танышыу.<br>- Шағир тураһында ҡыҫҡа мәғлүмәт биреү.<br>- Уҡытыусының уҡыуы,<br>-Һүҙлек һүҙҙәрен тикшереү;<br>Ете ырыу – ете суғы,<br>Елберләгән,<br>Балҡый,<br>- ни өсөн 7 тажы төшөрөлгән?<br>-**Ниндәй** инде төҫтәре?.( ниндәй һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табабыҙ<br>Дәреслек менән эшләү.<br>5. Дәреслектәге ҡағиҙәне уҡыу.<br><br>6.төркөмдәрҙә эшләп алайыҡ әле.<br>1.төркөм-Башҡортостан тәбиғәте тураһында<br>2.төркөм-Башҡортостан халҡы тураһында.<br>3. төркөм- Бәләбәй ҡалаһы тураһында<br>Бирелгән сифаттарҙан кәрәген һайлап алып һөйләм төҙөп ҡарайбыҙ.<br>Ҡунаҡсыл-Гостеприимный,<br>Бай- богатый, | Ете ырыу- ете суғы н аңлаталар<br><br>Сөнки 7 ырыу булған. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Йомарт- щедрый<br>Тәртипле- воспитанный,<br>Матур- красивый,<br>Һөйөклө- Любимый<br>Аҡыллы – умный,<br>Киң-широкий,<br>Йәшел- зеленый,<br>Йәмле- красивая природа<br>Тыуған –Родной<br>**( слайдта)**<br>Башҡортостан тәбиғәте-….,….,…,…,…..<br>Башҡортостан кешеләре….,….,…,….,..<br>Бәләбәй ҡалаһы һәм кешеләре ,…,…,…..,…..,…..,…( **карточкаларҙа)** | | |
| V**. Ял минуты** | - Уйын уйнап, ял итеп алайыҡ:<br>**Бер эйелә , бер бөгөлә,**<br>**Аҡланда ҡурай елгә,**<br>**Ҡояшты ла онотмай**<br>**Күҙәтә уны гел дә.**<br>**Ямғыр яуа башлағас.**<br>**Ҡурайға бит күңелһеҙ,** | Уҡытыусы артынан ҡабатлап хәрәкәттәр | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **Ҡояш нурҙарын һипкәс,**<br>**Ҡурай күтәрҙе башын.** | эшләйҙәр. | |
| VI.Белемде нығытыу(Яңы белемде практикала ҡулланыу) | **(Әңгәмә. Күнегеүҙәр аша белемдәрҙе нығытыу.**<br><br>**7.** Сифаттарҙы урынына ҡуй **(таҡтала)**<br><br>**Яҡшы** һүҙ балдан татлы.<br>**Яман** кешенең теле **әсе.**<br>**Көслө** берҙе еңер, **белемле** меңде еңер.<br>**Асыл** таш ерҙә ятмаҫ.<br>**Батыр** егет-ил күрке.<br>**Һөнәрле** кеше - **ҡоралды** кеше.<br>**Ялҡау** аҙ эшләй, аҙ эшләһә лә, күп тешләй.<br>**Башланған** эш - **бөткән** эш.<br><br>8. Тыуған ер , Ватан тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләбеҙ?<br><br>• Иле барҙың – көнө бар<br>• Данлы егет ил өсөн үлер.<br>• Ерһеҙ кеше — илһеҙ кеше.<br>• Сит ерҙә үҙ иледең эте лә яҡын.<br>• Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә.<br>• Тыуған ерҙең туҙаны ла ҡәҙерле. | 3 төркөмгә бүленеп эштәр башҡаралар .<br><br>Әңгәмәлә ҡатнашалар.<br><br>Бирелгән эште башҡаралар. | **Шәхси:** тасуири уҡыу күнекмәләре формалаша, уҡыуға ҡарата ҡыҙыҡһыныу<br><br>**Регулятив:** уҡыу мәсьәләһен (биремен) аңлау, ҡабул итеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү.<br><br>**Коммуникатив:** диалог төҙөйҙәр, һорауҙарға яуап бирәләр, башҡаларҙы тыңлай белеү, әңгәмәгә ҡушыла белеү формалаша |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | • Ил ҡәҙерен белмәгән – башын юғалтҡан,<br><br>-Бына ошондай бөйөк илдә йәшәгәнгә күрә лә композитор Ф. Иҙрисов ағайығыҙ Р.Бикбаев, Р.Шәкүр һүҙҙәренә музыка яҙған .Был гимн була ла инде . Беҙ һеҙҙең менән өйрәнә башланыҡ, әммә әлегә өйрәнелеп бөтмәгән. Йырлап ҡарайбыҙмы? | Гимнды ҡушылып йырлап ҡарайбыҙ | **Танып белеү:** анализлау, сағыштырыу, алған мәғлүмәтте дөйөмләштереү |
| VII. Өйгә эш | - Гимнды ятларға.<br>- 35-се биттәге 34- се күнегеүҙе башҡарырға.Сифаттарҙың аҫтарына һыҙырға.<br>- Башҡортостан темаһына Һүрәт төшөрөргә. | Көндәлеккә өй эшен яҙалар. | **Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алыу, анализлай, һайлай белеү.<br><br>**Регулятив:** яңы уҡыу мәсьәләһен ҡабул итә белеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | планлаштырыу. |
| VIII.Дәресте йомғаҡлау.<br><br>Эшмәкәрлеккә рефлексия. | - Шулай итеп, бөгөн дәрестә нимә белдегеҙ?<br>- Нимәгә өйрәндегеҙ? Дәрес башында ҡуйған маҡсаттарға ирештекме?<br>- Алған белемдәрегеҙ тормошта кәрәк булырмы?<br>Мин нимәләр белдем?<br>Миңә дәрестә оҡшаны…<br>Иң ҡыҙыҡлыһы булды.....<br><br>**Уҡыусыларҙы баһалау.**<br>1. Ҡул күтәреп яуап бирҙем- 1балл<br>2. Дәфтәрҙә тиҙ, дөрөҫ һәм бөтә эштәрҙе башҡарып өлгәштем.-1 балл<br>3. Таҡтаға сығып яуап бирҙем -1 балл<br>4. Мәҡәлдәр әйттем - 1балл<br>5Шиғыр һөйләнем - 1балл<br>- Дәрестә алған белемдәрегеҙҙе | Уҡыусыларҙың яуаптары. Нимәгә өйрәнеүҙәре тураһында әйтәләр<br><br>.Дәрес башында ҡуйған маҡсатты иҫкә төшөрөү,<br><br>Уҡыусылар үҙҙәренә балдар ҡуялар,баһалау битендә үҙҙәренә баһалар ҡуялар. | **Регулятив**: үҙҙәренең эшмәкәрлегенә баһа биреү, уҡытыусының баһаһына адекват ҡараш формалаша.<br><br>**Шәхси:** үҙүҫеш, баһалау |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | тормошта ла ҡулланырһығыҙ, тип ышанам. Рәхмәт. Дәрес бөттө. Һаубулығыҙ! | | һәләте үҫә. |